**1.10.10. Ололар байрамы.**

**Маҡсат.** Ололар көнөнә арнап концерт ҡуйыу, оло йәштәгеләрҙе хөрмәтләү, ихтирам итеү сифаттарын тәрбиәләү.

**Йыһаздар.** Зал байрамса биҙәлгән.

**Байрам барышы.**

- Хәйерле көн, хөрмәтле өләсәйҙәр, олатайҙар, әбей, бабайҙар.

- Бөгөн беҙ Ололар көнөн билдәләп үтәргә йыйылдыҡ.

- Ҡәҙерле ҡунаҡтар. Һеҙҙе ололар көнө менән ысын күңелдән ҡотлайбыҙ. Һеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, сикһеҙ шатлыҡ, балаларығыҙҙың игелеген күреп йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ.

Ололарҙың ҙур байрамы-
1 октябрь бөгөн.
Байрам булғас, бигерәк йәмле
Барыбыҙ ҙа шат бөгөн.

Бөгөнгө көн – иң матур көн,
Бигерәк һөйөнөслө.
Шатлыҡ бөркөп тора кеүек
Беҙҙең өйөбөҙҙөң эсе.

Беҙ ҡыуанышып ҡаршылайбыҙ
Ололарҙың байрамын.
Ҡотло булһын 1октябрь
Иң күңелле көҙ айы.

Байрамығыҙ ҡотло булһын,
Табынығыҙ мул булһын.
Күңел шатлыҡ менән тулһын
Ял кискгеҙ гөрләп торһон.

Йырҙар йырлап, бейей-бейей
Түңәрәкте урайбыҙ.
Ололарҙы яратабыҙ,
Уларҙы беҙ ҡотлайбыҙ.

Ҡәҙер-хөрмәт һеҙгә бөгөн
Олатай-өләсәйҙәр.
Һеҙ булғанда-беҙгә шатлыҡ,
Бабай һәм әбейҙәр.

Күмәк йыр. «Байрам бөгөн»

Мин ҡайтҡанда ҡаршы сыға,
Ҡосағына ала, яратып.
Күҙҙәрендә осҡон балҡып китә
Өйөбөҙгә шатлыҡ таратып.
Кем ул?
**Бергә.** Өләсәй.

Алсаҡҡайым, көләскәйем-
Ул минең өләсәйем.
Безгә ҡунаҡ килгән саҡта,
Ҡайната тәмле сәйен.

Иртә тороп аш бешерә,
Минең сәсемде үрә.
Унан инде, бисмиллалап,
Саҡыра сәй эсергә.

Сәй эскәндә һуҙып-һуҙып
Низер һөйләп һала,
Сынаяғын сыңылдатып,
Кеткелдәп көләп ҡуя.

Тик ҡайғырма, ғүмер үтә, тиеп
Сәстәрем дә, тиеп, салланды.
Бел өләсәй, аҡ сәстәрең булып
Аҡ күңелең миңә ялғанды.

**Йыр. Өләсәйемә.**

Атайым да, әсәйем дә
Унан кәңәш һорайҙар.
Ғаиләбеҙ ҙә бөтәһе лә
Ололаҡлап ҡарайҙар.

**Кем ул?** Олатай.

Гел яҡшыға өйрәтә
Тыңлайым унын һүҙен.
Һәр эштә үрнәк миңә
Яратамын мин үҙен.

Ауылдағы олатайға
Һоҡланмаған кеше юҡ.
Бөтәһе лә маҡтай уны
«Уңғанлыҡта – ише юҡ»

Оло яуҙа ҡатнашҡан
Күршеләге ветеран.
Унын батырлыҡтарын
Онотмаҫ бер ҙә Ватан.

Йәшәгеҙ, олатайҙар, йәш булып,
Тыуған йортҡа йәм булып.
Һеҙ булһағыҙ һау-сәләмәт,
Ейәндәргә булыр рәхәт.

Ейәндәргә терәк булып,
Йәшәгеҙ һеҙ шатлыҡта,
Сәләмәтлек, аҡ бәхеттәр
Юлдаш булғын ҡартлыҡта.

Өләсәйҙәргә йырланыҡ,
Бейеп тә күрһәтәйек.
Ерҙәге батырҙарҙы
Онотмайыҡ бүләкләйек.

**Бейеү. Гөлнәзирә.**

Көҙҙәр етә тиеп моңаймағыҙ,
Мәңге ғорур булып ҡалығыҙ.
Ҡояш кеүек янып йәшәгеҙ,
Йондоҙ ккеүек балҡып янығыҙ.

Ғүмер уҙа тиеп моңаймағыҙ,
Мәңге ғорур булып ҡалығыҙ.
Ҡояш кеүек янып йәшәгеҙ,
Йондоҙ кеүек балҡып янығыҙ.

**Йыр. Бәхеттә, шатлыҡта.**

- Хөрмәтле ололар. Һеҙҙәгеләй изгелек, һеҙҙәгеләй сабырлыҡ бик кәрәк беҙгә. Һау-сәләмәт булығыҙ. Тыныс матур тормошта ғүмер кисерегеҙ.



